# Коштар осорам…






Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы
тамам,
Бар эшемдең сыҡтым
осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан
алып
Күкрәгемдән ҡоштар
осорам.


Аҡлыҡ, хаҡлыҡ өсөн
көрәшселәр!
Тәү бүләгем һеҙгә, ҡарағыҙ:
Ҡанаттарын ғорур ҡаға-ҡаға
Күтәрелде күккә ҡарағош.


Юлдағылар! Һеҙгә
ебәрәмен
Ел - дауылдар үтәр
торнаны.


Сирлеләрем, кәкүк осорам
һеҙгә
Оҙаҡ – оҙаҡ саҡыра торғанын.


Сығып осто ярһыу бер һандуғас,
Ғашиҡтарым, һеҙҙең өлөшкә.



Көткәндәргә - аҡ күгәрсен килер,
Яңы өмөт өҫтәп өмөткә.


Хыялыйҙар , сая һәм
йыуаштар!
Һәммәгеҙгә тейер ҡошом


Ғәмһеҙҙәргә генә һис
нәмә юҡ
Әйҙә улар ҡошһоҙ
торһондар.


Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,
Бар эшемдең сыҡтым осона.
Шуға күрә бөгөн таңдан алып